# «Киләсәккә ышаныс менән ҡарайым!»



*Сер түгел, һәр бер мәҙәниәт усағының уңышлы эшләүендә етәксенең дә өлөшө баһалап бөткөһөҙ. Нефтекама филармонияһы был йәһәттән бәхетле. Уны мәҙәниәт, сәнғәт өлкәһендә билдәле шәхестәр етәкләне. Бөгөнгө директор **Рәйес Абдрахман улы Исмәғилев** тә — филармонияның киләсәге, артистары өсөн янып йәшәгән шәхестәрҙең береһе. Филармонияның киләсәге нисегерәк күҙаллана, етәксе ниндәй сифаттарға эйә? Рәйес Абдрахман улы менән әңгәмә ошо хаҡта.*

**— Һәр кемдең бала саҡ хыялы була. Һеҙ кем булырға хыяллана инегеҙ?**

— Мин тыуып үҫкән Белорет районының Зөйәк ауылы — Башҡортостаныбыҙҙың иң төпкөл ауылдарының береһе. Тап минең бала саҡ йылдарында беҙҙең яҡта тәүге автомашиналар күренгеләй башланы. Техникаға ылыға торғайным, ҡыҙыҡһыныуым көслө ине. Автомеханик булырға хыялландым, хатта уҡыным да. Артабан Өфө авиация институтына уҡырға инәм тигән саҡта, яҙмышым ҡырҡа боролош алды. Арыҫлан Мөбәрәков менән осраштым. Уларҙа йәшәргә лә тура килде. Беҙ уны Арыҫлан бабай тип йөрөтә торғайныҡ. Шулай, уның менән кәңәшләшеп, һөйләшеп йөрөй торғас, минең күңелдә моронлаған ынтылыш еңде, теләк тә бар ине — сәнғәт институтына уҡырға индем.

Ғөмүмән, музыкаға, сәнғәткә һөйөүем көслө булды. Гармунда, баянда уйнап, ауыл сәхнәләрендә сығыш яһап, концерттар ҡуйып йөрөй торғайныҡ. Ауылда саҡта журналдан ҡарап, Ғата Сөләймәновтың дәреслеге буйынса ҡурай эшләп, үҙаллы уйнарға ла өйрәндем.

**— Һеҙ ҡайҙа эшләһәгеҙ ҙә, етәксе вазифаһында. Бының «сере» нимәлә?**

— Сере юҡ. Бәләкәйҙән етәксе булырға хыялландым. Теләһә кемгә буйһонмай торғайным. Әгәр кәрәк тип тапһам, ихлас эшләнем. Теләмәһә, кешене бер кем дә етәксе итеп ҡуя алмай, ҡуйған хәлдә лә бындай кеше эшен еренә еткерә алмаясаҡ. Етәксе булыу минең ҡанымдалыр, тим. Мәктәптә үк вожатый ҙа, төрлө сараларҙа етәксе булып та теләп ҡатнаша торғайным. Сәнғәт институтында уҡығанда комсорг, профком рәйесе булдым. Бишенсе курста уҡығанда уҡ коммунистар партияһы ағзаһы инем.

Яҙмышыма рәхмәтлемен. Эйе, режиссер ҙа — етәксе бит инде ул. Театр режиссураһына уҡығанда, дүртенсе курста, Әмир Абдразаҡов



*Рәйес Исмәғилев остазы Әмир Абдразаҡов менән*

мине телевидениеға режиссер ярҙамсыһы итеп алды. «Туй», «Ҡилен килә» фильмдарында массовкала ҡатнашып йөрөнөм. Шулай уҡ режиссер ассистенты булараҡ эшләп, кино сәнғәтенең серҙәренә төшөндөм.

Яҙмыш шулай хәл итте: мин Өфөлә ҡалдым. 20 йыл Башҡортостан телевидениеһында режиссер булып эшләнем. Йәшләй генә баш режиссер итеп тәғәйенләнеләр. Унда тәжрибәле, юғары белемле байтаҡ режиссерҙар, ярҙамсылар эшләп йөрөй ине. Шулар араһынан мине һайланылар. Был да юҡҡа түгелдер, тим. Сөнки бер ваҡытта ла эшкә һүңлап, репетицияларҙан ҡасып йөрөмәнем. Егелеп эшләнем, шул уҡ ваҡытта Башҡорт дәүләт университетында «Йәнгүзәл» фольклор ансамбле менән етәкселек иттем, драма түңәрәген алып барҙым, телефон аппаратураһы заводында ла фольклор ансамблен етәкләнем. Ғаилә ҡорған йәш саҡ, аҡса кәрәк, шуға иртә таңдан ҡараңғыға тиклем эшләнем.

**— Нефтекама дәүләт филармонияһы директоры вазифаһына тәҡдимде нисек ҡабул иттегеҙ?**

— Әлбиттә, ыңғай. Нефтекама менән күптән таныш инем. Ниндәй ҡала икәнен беләм. Дөрөҫөн әйтергә кәрәк: башҡа урындарға ла тәҡдимдәр булды, шулай ҙа бында ризалаштым, һис үкенмәйем, үҙем теләп килдем. Аллаға шөкөр, ҡыуанып эшләп йөрөйөм. Бында халыҡ етеҙ темп, шәп ритм менән йәшәй һәм эшләй. Ҡешеләре һәйбәт, һауаһы таҙа, бик күркәм ҡала.

**— Филармония һеҙҙең өсөн ятыраҡ булманымы?**

— Был миңә ят эш түгел. Нефтекама филармонияһының ижады, үҫеше менән электән таныш инем. Килгәс тә төрлө тәҡдимдәр менән ҡала етәкселегенә сыҡтым. Эшләйем тигән кешегә етәкселек тә ярҙам итергә әҙер тора. Хакимиәт башлығы, хакимиәттәге башҡа хеҙмәткәрҙәр, ниндәй генә тәҡдим менән барһам да, кире ҡаҡмай. Бөтә эште лә ҡала етәкселеге менән бергәләп, килешеп эшләйбеҙ, еренә еткереп башҡарабыҙ. Үҙ сиратыбыҙҙа беҙ ҙә уларға ярҙам итергә әҙер.

Ҡала хакимиәте менән берлектә «Дуҫлыҡ күпере» программаһын әҙерләнек. Был иһә Нефтекама ҡалаһы менән Татарстандың Минзәлә ҡалаһы һәм районы араһындағы мөнәсәбәтте тағы ла киңәйтеү ниәтендә эшләнде. Ул мәҙәни яҡты ғына күҙ уңында тотмай, йәшәйешебеҙҙең төрлө өлкәһенә ҡағылышлы мәсьәләләр ҙә хәл ителәсәк. Дуҫлыҡ та, мөхәббәт тә, кешеләр араһындағы мөнәсәбәттәр ҙә усаҡ кеүек бит ул, ваҡытында «утыныңды» өҫтәп тормаһаң, һүрелеүе, һүнеүе мөмкин.

Дөрөҫөн әйтергә кәрәк, беҙ ҡала хакимиәтенә, Мәҙәниәт министрлығына бик рәхмәтлебеҙ. Яңы ғына ҡала етәкселеге филармония артистарына дөйөм ятаҡтан бүлмәләр бирҙе. Беҙҙә торлаҡһыҙ артистар юҡ, был — бик ҡыуанысл күренеш. Ситтән килгән артистарға, музыканттарға бөгөнгө көндә фатир бирә алабыҙ. Филармонияға сит ил машинаһы ла бүләк иттеләр. Шулай уҡ Мәҙәниәт министрлығы биргән өҫтәмә аҡсаға филармония өсөн өр-яңы тауыш һәм яҡтыртыу аппаратуралары алдыҡ. Өфө, Ҡазан, Санкт-Петербург, Мәскәү ҡалаларынан гастролдәр менән килгән артистар беҙҙең йыһаздарҙы бик ыңғай баһалай. Ниһайәт, көҙ көнө филармонияның тамаша залын йылыттыҡ, ул ҡышын һалҡынyраҡ була торғайны. Тамаша залындағы креслоларҙы яңырттыҡ.

Тырышып эшләһәң, эш бара. Артистарға бөгөн ижад итергә мөмкинлектәр бар. Яңы «ГАЗель» автомобиле алдыҡ. Бер тотҡарлыҡһыҙ төрлө яҡтарға йөрөй алабыҙ.

**— Ә гастролдәр менән ҡайҙарҙа булаһығыҙ?**

— Беҙ күпселек Свердловск өлкәһе, Екатеринбург ҡалаһы, Пермь крайы, Татарстан, Марий Эл республикалары, Башҡортостандың барлыҡ районда булабыҙ. Артистарыбыҙ тартынып тормай, бәләкәй генә ауылдарҙа ла концерт күрһәтә. Ә төпкөлдә йәшәгән халыҡ быға ифрат шат, рәхмәтле булып ҡала.

Нефтекама филармонияһының киләсәге бик өмөтлө, ышанысл, тип уйлайым.

**— Һеҙ — оптимистик рухлы кеше. Шулай ҙа тормошта кәйефегеҙҙе төшөргән, борсоған нәмәләр ҙә барҙыр?**

— Халыҡ ныҡ эскегә бирелә. Эскән кеше эшен еренә еткереп эшләмәй, ғаиләһе тарҡала. Был беҙҙең халыҡҡа ғына хас күренеш түгел, тотош Рәсәйгә ҡағыла. Мине ошо хәл бик борсой. Ҡесе йәштән балаларға тейешле дәрәжәлә тәрбиә бирелмәй, тип уйлайым. Беҙ уҡығанда, хәтеремдә, класстан тыш

*Нефтекама филармонияһы коллективы*



дәрес үткәрелә торғайны. Шунда тормошта осраған төрлө хәл-ваҡиғаларҙы тикшерҙек, бик йәнле фекер алышыу була ине. Ошо дәресте тотош класс менән көтөп ала торғайныҡ. Унда ололар һәм йәштәр, ҡыҙ һәм егет мөнәсәбәте, ағай-апайҙар, етәксе менән нисек аралашыу кеүек мәсьәләләрҙе өйрәндек. Теманы әхлаҡи яҡтан да, тормош күҙлегенән дә сығып тикшерҙек. Ошондай тәрбиәүи дәрестәр етешмәй хәҙер. Ауылдарҙа мәсеткә һирәк йөрөйҙәр, клубтар йүнләп эшләмәй. Бына беҙҙең Зөйәк ауылы — райондағы иң ҙур ауылдарҙың береһе. Ә клубҡа кәрәклек түгел, емерелергә тора.

Сәнғәт — ул күңел аҙығы. Эйе, кеше ашамай тора алмай, әммә рухи ризыҡ булмаһа, уның күңеле ярлылана. Сәнғәттең халыҡҡа тәьҫире бик көслө, тип уйлайым. Кеше мәҙәниәт усағына аңлы рәүештә килә. Сәхнәлә барған күренештең ысын түгел икәнлеген аңлаһа ла, шуға ышанып, көлөп, ҡул сабып ултыра, йә геройҙарҙы ҡыҙғанып, илап та ала, шунан күңеле бушанып, тынысланып ҡайтып китә. Театр, филармония, мәсеттәргә, музейҙарға йөрөү мотлаҡ кәрәк.

**— Ә нимәләр һеҙҙең күңелдә ғорурланыу тойғоһо уята?**

— Ғорурланыу киң мәғәнәгә эйә. Минең күңелем бөгөнгө көндә тыныс йәшәүгә ҡыуана. Илебеҙ тыныс, ризыҡ етерлек, өҫтөбөҙ бөтөн, ни теләһәң, шул бар. Ниңә былар минең өсөн мөһим, тиһәгеҙ, төпкөл ауылда үҫтем бит. Әле лә бик яҡшы хәтерләйем: алтмышынсы йылдарҙа ризыҡҡа ҡытлыҡ ине, быны сәбәбе — яҡын-тирә менән ауылды тоташтырған юлдың булмауы. Беҙҙең ауыл халҡы Ҡаратау аша сығып, 12 саҡрым тау-таш араны үтеп, боҙло һыу кисеп, көн дә күрше Берештамаҡ ауылынан икмәк һатып ала ине. Кейем дә әллә ни булманы. Мин беренсе класҡа бәләкәй калуш кейеп барғанымды хәтерләйем. Юл бысраҡ, батҡаҡ, теге калуш шунда батып ҡала, һиҙмәй ойоҡсан атлап китәһең дә бараһың, аҙаҡ шул бысраҡ ойоҡ менән калушты кейеп, мәктәпкә барабыҙ. Ҡайтышлай Инйәргә төшөп, йыуып ала торғайныҡ. Етешһеҙлек, аслы-туҡлы йәшәүҙе бик яҡшы хәтерләйем. Ләкин быны бер оятын да күрмәйем. Хәҙерге бөтөнлөккә, барлыҡҡа шатмын.

Ер шарының төрлө илдәрендә булырға тура килде. Әммә Башҡортостаныбыҙҙың гүзәл тәбиғәтенә тиңләрлек төбәк юҡ. Ҡайһы бер өлкәләр, әйтәйек, йәшәү кимәле буйынса беҙҙән егерме йылға артта ҡалған һымаҡ. Шулай күреп, йөрөп ҡайтҡас, үҙебеҙҙең кешеләргә ҡарап ҡыуанам. Бына, Зөйәк ауылында йәштәргә өй һалырға урын юҡ. Тау баштарын, сабынлыҡты һайлайҙар. Йәштәр ауылда ҡала. Был да бик ҡыуаныслы күренеш. Халыҡ үҙен үҙе ҡарап йәшәй. Йорттары матур, сағыу төҫтәргә буялған. Был инде — республика етәкселегенең төрлө программалар ярҙамында ауыл эшсәндәренең йәшәү шарттарын яҡшыртыу ниәтенән башҡарылған эштәр һөҙөмтәһе. Шуға мин бик кинәнеп эшләйем. Республика етәкселегенә, халҡыма рәхмәтлемен.

Ни тиһәң дә, беҙҙең халыҡ концерттар, спектаклдәр, йыр-моң ярата, матур йәшәргә ынтыла. Был да — минең өсөн бик ҙур ҡыуаныс.

*Айнур ДӘҮЛӘТБӘКОВ*
*әңгәмәләште.*